# Мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтеү



## Уҡытыусылар өсөн методик ҡулланма

Өфө – 2016

**Дәүләтшина Мәүлиха Фәрит ҡыҙы,Республика башҡорт лицей-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

**Мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтеү (уҡытыусылар өсөн методик ҡулланма)**

«Мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтеү» тигән уҡыу әсбабында мәғлүмәтте табыу, интерпритациялау, баһалау буйынса планлаштырылған һөҙөмтәләргә ирешеү юлдарын күрһәткән текст менән эшләү алымдары тәҡдим ителә. Уларҙы ҡулланыу уҡытыусыға уҡыусыларҙың мәғлүмәти компетентлығын үҫтереүҙә ярҙам итә. Тәҡдим ителгән  алымдар мауыҡтырғыс, уларҙың күбеһе тормош менән бәйле булғанлыҡтан уҡыусыларҙы текстҡа һалынған мәғлүмәт менән эшләргә этәрә. Быңдай эшмәкәрлек нигеҙендә формалаштырылған компетенциялар балаларҙа башҡа мәғлүмәт сығанаҡтары менән эш итеүҙә нигеҙ буласаҡ.

# ИНЕШ

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында мәғлүмәти компетентлыҡ төп урынды алып тора. Мәғлүмәти йәмғиәт шарттарында шәхестең уңышлы үҫеш сығанағы булараҡ мәғлүмәттең роле артты. Ни өсөн был проблема актуаль? Хәҙерге йәмғиәттә төрлө мәғлүмәт көндән-көн арта бара. Ошо ағымда юғалып ҡалмайынса төрлө уҡыу, тормош мәсьәләләрен сисеү өсөн кеше компетентлы булырға тейеш.

Бөгөнгө көндә мәғлүмәт сығанаҡтары бик күп. Балалар уларҙы белергә һәм дөрөҫ файҙаланырға тейеш. Уҡыу процесында иң тәүге урында текст менән эш тора. Уҡыусылар өсөн текст - тирә-яҡты танып-белеү сығанағы, ә уҡытыусы өсөн уҡыусыны дөрөҫ һөҙөмтәгә килтереү ҡоралы. Шуның өсөн хәҙерге ваҡытта уҡыусыларҙа мәғлүмәти компетентлыҡты формалаштырыу өсөн текст менән эшләгәндә эффектлы алымдарҙы эҙләү кәрәге тыуҙы.

Педагогик, методик, психологик әҙәбиәтте, коллегаларҙың эш тәжрибәһен өйрәнеү, уҡыусыларҙың текст менән эшләү эшмәкәрлеген күҙәтеү, уҡыу программалары, заманса белем биреү технологиялары  (продуктив уҡыу, тәнҡитле фекерләү, проблемалы диалог, һ.б.) талаптарына нигеҙләнгән алымдарҙы асыҡларға ярҙам итте. Уларҙың мауыҡтырғыс булыуы уҡыусыларҙа уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уята. Эш тәжрибәһенә нигеҙләнеп мәғлүмәт менән эшләүҙә танып белеү ихтыяжының төп мотивацион компонент икәнлеген аңланым.

Мәғлүмәт менән эшләү алымдарының атамалары мауыҡтырғыс характерҙа булыуына ҡарамаҫтан, улар бөтәһе лә продуктив уҡыу технологияһы талабына ярашлы тексты уҡығанға тиклем һәм уҡығандан һуң фактуаль, кинәйәле, концептуаль мәғлүмәт табыуға йүнәлтелгән. Уларҙы ҡулланыу дәрестә, әҙәби әҫәр өҫтөндә эш барышында эҙләнеү, өйрәнеү, мәғлүмәтте аңлау, эшкәртеү, баһалау

keүек эшмәкәрлек булдырыуға ҡоролған. Теге йәки был эшт рҙе башҡарғанда ҡулланылған алымдар йыш ҡына ижади характерҙа булып, практик йүнәлешле һәм тормош менән бәйле. Был әҫәр өҫтөндә эште ойоштороуҙа төп шарттарҙың береһе булып тора.

## Информацион компетентлыҡты үҫтереүсе сара булараҡ текст менән эш

Мәғлүмәт тиз үҙгәреп торған йәмғиәттә ҙур уңышҡа өлгәшер өсөн, кеше юғары кимәлдәге информацион компетентлыҡҡа эйә булырға тейеш. Белгестәр иҫбатлауынса, был процесҡа башланғыс мәктәптән үк өйрәтергә кәрәк.

А.В. Хуторской билдәләүенсә, “Мәғлүмәти компетентлыҡ ул - уҡыусыларҙың үҙ аллы эҙләнә белеү, анализлау, кәрәк мәғлүмәтте һайлап алыу, информацион компетенцияларҙы эшкәртә һәм кәрәкле булған мәғлүмәттәрҙе телдән һәм яҙма рәүештә еткерә белеү һәләте” [8;56]. Икенсе төрлө әйткәндә, мәғлүмәти компетентлыҡ - ул таба, һаҡлай һәм мәғлүмәттең төрлө төрҙәрен ҡуллана белгән шәхестең үҙенсәлеге.

Бөгөнгө йәмғиәттә ҡайһы берәүҙәр мәғлүмәти компетентлыҡты компьютер менән эш итә белеү, тип яңылыш аңлайҙар. Ләкин, төп дөйөм белем биреү программаларында, “Уҡыу. Текст менән эш (предмет-ара һөҙөмтәләр)” бүлегендә ошолай тип билдәләнгән: “... дөйөм төп белем биреү баҫҡысында сығарылыш уҡыусылары барлыҡ мәктәп фәндәрен өйрәнгәндән һуң мәғлүмәт менән төрлө йүнәлештә

эш итеү һәләтенә эйә булалар, һәм был компетенциялар текст уҡыу барышында формалаша” . [7;13].

Уҡыусылар практик уҡытыу мәлендә төрлө текст төрҙәре менән танышалар (ғилми һәм художестволы). Һәр текст төрө билдәле алым менән өйрәнеүҙе талап итә. Ләкин, ниндәй генә текст менән эшләүгә ҡарамаҫтан, төп талап булып уҡый белеү тора. А.С. Пушкин әйтеүенсә, “Әҫәрҙе ябай, эмоцияһыҙ уҡыу бер нимә лә бирмәй. Аңлы уҡыу – нимәлер алыуға булышлыҡ итә, ә аңлы һәм тәрән тойғоларға бирелеп уҡыу - ҙур камиллыҡ”. Нәҡ аңлы, тәрән тойғоло итеп уҡыу тексҡа һалынған мәғлүмәт менән эш итеүҙең нигеҙендә ята. Ошо оҫталыҡ арҡаһында мөһим компетенцияларҙың формалашыуы барлыҡҡа килә. Әҙәбиәт донъяһына, йәки һүҙ сәнғәтенә ылығыу, балаларҙа дөйөм мәҙәни компетенцияларҙың формалаштыра.

Төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары (китаптар, карталар, белешмәләр, интернет селтәре) менән эш итеү процесында уҡыусыларҙың мәғлүмәти компетенциялары үҫешә.

Уҡылған текстан ҡалған тәьҫораттар менән бүлешергә ынтылыу, үҙ фекереңде башҡаларға еткереү, ҡарашыңды иҫбатлау, ваҡиғаларға баһа биреү, шул иҫәптән кисерелгән тойғолар күҙлегенәнт сығып биргән баһа ла, былар барыһы ла коммуникатив, уҡыу, танып белеү һәм башҡа компетенцияларҙың формалашыуына булышлыҡ итә. Һөҙөмтәлә былар барыһы ла мәғлүмәти компетенцияның үҫешенә килтерә.

Мәғлүмәт менән эшләгәндә төп шарт булып тексты дөрөҫ аңлау тора. Был проблема өҫтөндә күп методист-русистар, тел ғалимдары, психолингвистар, философтар, эшләгән һәм бөгөн дә эшләйҙәр. А.А. Брадный, Л.П. Доблаев, А.А. Смирнов, А.А. Леонтьев, А.Н. Соколов һәм башҡалар тексты аңлау һәм үҙләштереү процесын тикшергәндәр, А.С. Штерн тексты үҙләштереү механизмдарын анализлағандан һуң, мини-текст булып торған, “мөһим һүҙҙәр” концепцияһын эшләп сығара. К.Д. Ушинский , В.Г. Горецкий, М.Р. Львов, Н.Н. Светловская, Т.А. Ладыженская, О.В. Соболева, М.И. Оморокова, М.С. Соловейчик, М. П. Воюшина, О.В. Джежелей, Г.Г. Граник, Т.Г. Егоров һ.б аңлы уҡыу һәм уның формалашыу алымдары тураһында яҙғандар. Г.Г. Граник һәм лаборатория хеҙмәткәрҙәре уҡыусыларҙың художестволы тексты аңлап уҡыу өлкәһендә төрлө тикшеренеү эштәрен үткәрҙеләр. Уларҙың тикшереү һөҙөмтәләре “Когда книга учит”, “Как учить работать с книгой”,

“Дорога к книге” эштәрендә килтерелгән. Л.С. Выготский, А.Н. Льонтьева, В.В Давыдовтарҙың теорияларына таянып, М.И. Оморокова менән И.А, Раппопорттарҙың эштәре тексты яҡшы үҙләштерер өсөн күнегеүҙәр системаһын үҙ эсенә ала. О.В. Соболева аңлы уҡыу проблемаһы өҫтөндә эшләй. Үрҙә һаналып киткән авторҙарҙың эштәрен өйрәнеү һәм анализлау, уҡытыусыға балаларҙы мәғлүмәтле текст менән эш итеүҙе дөрөҫ ойоштororға ярҙам итә.

Мәғлүмәт менән эшләү юлдары шулай уҡ башҡорт ғалимдарының методик хеҙмәттәрендә лә тәҡдим ителгән. Был хеҙмәттәр дөйөм методика фәне буйынса яҙылһа ла айырым бүлектәрендә күрһәтелгән тема буйынса йүнәлештәр бирелгән. Мәҫәлән: Аҙнағолов Р.Ғ. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы”, Ғафаров Б.Б. “Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы”, Иҙелбаев М.Х. “Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре”, Исҡужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. “Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы”, Сөләйманов Ә.М., Хөббитдинова Н.Ә. “Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары” хеҙмәттәрендә.

## Уҡыусыларҙың информацион компетентлығын формалаштырыуҙағы методик шарттар

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы алдында торған, мөһим мәсьәләләрҙең береһе –ул аңлы уҡыусыны тәрбиәләү, йәғни информацион компетентлыҡтың формалашыу нигеҙендә уҡыуҙың төп сифаты булараҡ аңлылыҡ ята. Был процестың һөҙөмтәһе балаларҙың эшмәкәрлеген оҫта ойошторолғанда ғына юғары була. Бындай шарттарға түбәндәгеләр инә:

- уҡыусыны мәғлүмәт менән эшләүгә ҡыҙыҡһындырыу;

- текст менән эшләгәндә, уҡытыусының хәҙерге заман белем биреү технологияларын эффектлы ҡулланыуы;

- текстағы мәғлүмәттең 3 төрөн уҡып төҙәтеү эшен ойоштороу:

• фактуаль мәғлүмәттең (текста асыҡ итеп бирелгән мәғлүмәт);

• текст артында йәшерелгән мәғлүмәттең (текста асыҡ әйтелмәгән хәбәрҙе, яҙыуҙа әйтеп бөтөрмәгән уйҙарҙы тотоп алыу, кинәйәне аңлау);

• концептуаль мәғлүмәттең (текстың төп фекере, мөһим мәғәнәһе).

**Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен** ҡулланыу:

• **ҡарап сығыу** (текст менән танышыу, күҙҙән үткәреү), маҡсаты - уҡыласаҡ материал һәм текста ҡаралған һорауҙар теҙмәһе тураһында дөйөм төшөнсә алыу, күҙ алдына килтереү;

• **эҙләнеү**, маҡсаты — текста мөһим булған урындарҙы тиҙ арала табыу (факттар, характеристикалар, һан күрһәткестәре, йәғни конкрет мәғлүмәттәр);

• **өйрәнеү**, маҡсаты — текста булған мәғлүмәтте тулыһынса, дөрөҫ итеп һәм тәнҡитле аңлау;

• **танышыу**, маҡсаты — текстағы мөһим мәғлүмәтте табыу, ҡыҙыҡһындырған һорау буйынса нимә әйтелгәнен күрһәтеү, йөкмәткеһен дөйөм күҙаллау;

• **һайланма,** маҡсаты — аңлатыу, фаразлау, фекерләү формаларында текска аңлатма биреү;

- "Уҡыу. Тест менән эш" программаһының тәҡдимдәрен үтәү;

- компетентлы һәм эшмәкәрле ҡараш нигеҙендә мәғлүмәт менән эшләргә өйрәтеү.

## Профессор Н.Н.Светловскаяның продуктив уҡыу технологияһы буйынса текст менән эш ойоштороуҙың үҙенсәлектәре

Уҡыусыларҙың информацион компетентлығын формалаштырыу өсөн хәҙерге заман уҡытыусыһының эффектлы ҡоралы булып белем биреү технологиялары тора. Был технологиялар текст менән эш итеү өлкәһендә көтөлгән һөҙөмтәләргә ирешергә ярҙам итә. Продуктив уҡыу, яҙыу һәм уҡыу аша тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереүсе, проблемалы-диалогик, уҡыу ҡаҙаныштарын баһалаусы һәм башҡа технология төрҙәрен ҡулланып эшләгән уҡытыусылар, уҡыусыларының текст өҫтөндә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән эшләүҙәрен, мәғлүмәтте эҙләү, эшкәртеү һәм төрлө хәлдәрҙә ҡулланыу менән бәйле булған күнегеүҙәрҙе башҡарғанда юғары һөҙөмтәләр күрһәтеүҙәре тураһында ҙур ышаныс менән әйтә алалар.

**Продуктив уҡыу технологияһының маҡсаты** булып дөрөҫ уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу, тексты үҙ аллы аңлай белергә өйрәтеү тора. Был технология коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуға, уҡығанды аңлатыуға, үҙ ҡарашыңды асыҡ әйтә белеүгә, авторҙы аңлауға, тексты ҡысҡырып (ишеттереп) һәм үҙ аллы (эстән) аңлы уҡый белеүгә йүнәлтелгән; танып белеү эшмәкәрлеген, йәғни - текстан мәғлүмәтте һайлап ала белеү һәләтен үҫтереүгә ҡоролған.

Текст менән эш өлөшләп үткәрелә

**I этап. Уҡыу алдынан текст менән эш**

1. Антиципация (уҡыласаҡ тексты алдан уҡ күрә белергә тырышыу).
2. Тексттың мәғәнәүи, тематик, хисле йүнәлештәрен билдәләү, әҫәрҙең һәм авторҙың исеме, асҡыс һүҙҙәр буйынса, алдан уҡылған тексттың иллюстрацияларына һәм уҡыусының уҡыу тәжрибәһенә таянып геройҙарҙы бүлеп күрһәтеү.
3. Уҡыусыларҙың эшкә дөйөм әҙерлектәрен (уҡыуға, дәлилләүгә, эмоциональ, психологик торошторын) иҫәпкә алып дәрестең маҡсаттарын билдәләү.

**II этап. Уҡыу барышында текст менән эш**

1.Тексты беренсе ҡат уҡып сығыу.

2.Уҡыусыларҙың тексты беренсе ҡат уҡығандан һуң нисек аңлауҙарын асыҡлау. Уҡылған тексттың йөкмәткеһе, эмоциональ төҫмөрөнә уҡыусыларҙың беренсе фараздарына тура килеү-килмәүен асыҡлау.

3.Тексты ҡабаттан уҡыу. Ҡабаланмай “ентекле итеп” ҡабаттан уҡып сығыу (тулы тексты йәки айырым өҙөктәрен генә).

4. Текстҡа анализ. Һәр бер мәғәнәле өлөшкә асыҡ һорау ҡуйыу. Тексттың йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ойоштороу.

5.Тексттың айырым фрагменттарына мөрәжәғәт итеү (кәрәк булғанда ғына).

6. Тасуири уҡыу.

**III этап. Уҡып сыҡҡандан һуң текст менән эш**

1. Текст буйынса концептуаль (мәғәнәүи) әңгәмә ойоштороу.
2. Тексттың идея-проблематикаһын, йәғни төп мәғәнәләренең күплеген билдәләү.
3. Яҙыусы менән танышыу. Уның тураһында һөйләү. Яҙыусы шәхесе тураһында һүҙ алып барыу.
4. Китаптағы материалдар, өҫтәлмә сығанаҡтар менән эш итеү.
5. Тексттың исеме, иллюстрациялары менән эшләү. Исемдең мәғәнәһе тураһында әңгәмә алып барыу.
6. Уҡыусыларҙың әҙер иллюстрацияларға мөрәжәғәт итеүе.
7. Уҡыусының күҙҙалауын авторҙыҡы менән сағыштырыу.
8. Уҡыусыларҙың уҡыу эшмәкәрлегенә таянып эшләнгән ижади күнегеүҙәр ( хис-тойғо, фараз итеү, уҡығанды аңлау, төрлө ижади эштәр).

**Яҙыу һәм уҡыу аша уҡыусыларҙың тәнҡитле фекерләү ҡеүәһен үҫтереүсе технологияларҙың алымдары (авторҙары – Чарльз Темпл, Джинни Стил, Курт Мередит)**

Был технологияның маҡсаты уҡыусыларҙың уҡыуҙан тыш, көндәлек тормошта ҡуллана алырлыҡ фекерләү күнекмәләрен үҫтереү. Бындай алымдар компетентлы ҡараш менән уҡыусыларҙы уҡырға һәм тәрбиәләргә мөмкинселек бирә.

Технология түбәндәге **белем һөҙөмтәләренә** өлгәшер өсөн ҡоролған:

- белем өлкәһендәге көндән-көн артып һәм яңырып торған мәғлүмәттәр ағымы менән эшләй белеү;

- эргә-тирәләге кешеләргә үҙ фекереңде (яҙма һәм һөйләү телмәрендә) аныҡ, ышандырырлыҡ, дөрөҫ итеп еткерә алыу;

- төрлө тәжрибә һәм төшөнсәләргә таянып үҙ фекереңде әйтеү;

- мәсьәләләрҙе сисә белеү; үҙ аллы уҡыу өҫтөндә эшләй белеү;

- хеҙмәттәшлек һәм төркөмдә эшләй белеү; кешеләр менән конструктив мөнәсәбәт булдыра алыу.

**Текст менән эшләү алымдары:**

- инсерт

- кластер

- һеҙ ышанаһығыҙмы

- идеялар кәрзине

- фал ағасы

- мөһим һүҙҙәр

- БТБ (беләм, теләйем, булдыра алам)

- көндәлектәр һәм борт журналы

- плюс, минус, ҡыҙыҡ

Тәнҡитле фекерләү ҡеүәһен үҫтереүсе технология һәм башҡа алымдар ҡулланыу үҙенсәлектәре тураһында ҡулланманың киләһе биттәрендә яҙыла.

**Тормош менән бәйле һәм ҡыҙыҡлы текст менән эшләү алымдары**

Уҡыусының эшмәкәрлегендә, шул иҫәптән текстҡа һалынған мәғлүмәт менән эш иткәндә, танып белеү ихтыяжының төп сәбәбе – маҡсат булыуы күптән иҫбатланды. Уҡыусының ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптарҙы табыу теләге, шуның менән үҙенең аңын киңәйтеү, уҡыу һәм тормош маҡсаттары менән алған мәғлүмәтте ҡуллана белеү һәм артабан тапшырыу, систематик характерҙа өҫтәлмә мәғлүмәт эҙләү теләге – былар барыһы ла уҡыусының текстҡа мөрәжәғәт итеүенең сәбәбе булып тора. Д.Б. Эльконин бындай мотивацияның барлыҡҡа килеүен дөрөҫ ойошторолған эштең емеше тип билдәләй [9;110]. Түбәндә килтерелгән алымдар текст менән эш барышында уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята, беренсенән, уларҙың

атамалары ҡыҙыҡлы, икенсенән, улар текст менән бәйләнмәгән, уҡыусылар был алымдарҙы көндәлек тормошта ҡулланыу тәжрибәһенә эйә ( «Реклама», «Рюкзак», «Мин-рәссам»). Был һүҙҙәрҙең текст менән бәйле булыуын белеү теләге, уны уҡыу уҡыусыларҙы дәртләндерә, уларҙың танып белеү эшмәкәрлеген арттыра. Ҡабатлап әйткәндә, мәғлүмәт менән эшләү алымдарының бөтәһе лә предмет, предмет-ара һәм шәхси һөҙөмтәләргә ирешеү маҡсаттарына ҡоролған. Был һөҙөмтәләр эшмәкәрле һәм компетентлы ҡарашты тормошҡа ашырыуға таянып эшләнгән.

Был алымдарҙы башҡарғанда уҡытыусы үҙ алдына ниндәй маҡсаттар ҡуя икән?

**«Сүкеш»** - уҡыу барышында уҡыусылар аңлашылмаған һүҙҙең мәғәнәһен һорап, йәки асыҡлау теләге менән туҡтап (“сүкеш” менән өҫтәлгә һуғып), авторға һорау бирә алалар;

**«Мин-автор»** - автор ролен үҙҙәренә алып, уҡыусылар, текст эсендәге берәй факттың, геройҙың, образлы сағылыштың дөрөҫ ҡулланышын иҫбатлайҙар, текстың ниндәй маҡсат менән яҙылғанын һөйләйҙәр;

**«Смайлик» -** хис-тойғо аша геройҙарға, ваҡиғаларға, текстың теленә мөнәсәббәттәрен белдерәләр;

**«Ирекле микрофон»** - уҡыусылар текстың жанры, персонаждарҙың әхлаҡи сифаттары, әҫәрҙең төп фекере, текстағы мәғлүмәттең әһәмиәте тураһында фекерҙәрен белдерә;

**«Реклама»** - уҡыусылар яҙма йә һөйләү формаһында уҡылған текст буйынса реклама күрһәтәләр, текстың тел байлығы, практик ҡулланылышы, фәһемлеге күҙ уныңда тотола;

**«Һорауҙар йомғағы»** тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлгәндә ҡулланыла (Кем? Ҡайҙа? Нимә эшләй?).

**«Мин - рәссам» -** ижади характерҙағы эштәрҙе башҡарғанда билдәле бер хәрәкәткә ҡараған художестволы образдарҙы һүҙҙәр ярҙамында һүрәтләү, иллюстрация, декорациялар төҙөү.

**«Арҡа муҡсаһы”**. Был муҡсай дәрестең рефлексия этабында ҡулланыла. Муҡсай ҡулдан-ҡулға тапшырыла. Уҡыусылар әҫәрҙе өйрәнеү барышында ниндәй белемгә эйә булған, нимә хәтерҙәрендә ҡалған, ниндәй әхлаҡи нормаларҙы үҙләштергән – шул турала һөйләй.

## Мәғлүмәти компетентлыҡ үҫешенә йүнәлтелгән «Уҡыу. Текст менән эш» программаһының планлаштырылған һөҙөмтәләре

Мәғлүмәт, текст менән эште ойоштороуҙа укытыусы “Уҡыу. Текст менән эш” программаһына таяна, тип алда әйтелгәйне. Был программа мәғлүмәт менән эш төрөн генә билдәләп ҡалмай, ниндәй эш формаһы, билдәле бер йүнәлештә конкрет һөҙөмтәләргә ирешеүҙә эффектлыраҡ алым ҡулланырға кәрәк икәнлеген күрһәтә. «Матрица. Текст менән эш» таблицаһында текст менән эштең төрлө этаптарында ҡулланырға мөмкин булған алымдар күрһәтелгән.

**Матрица.**

**Текст менән эш**

| Текст менән эшкә йүнәлеш биреү | Планлаштырылған һөҙөмтәләр | Методик алымдар |
|---|---|---|
| Текст өҫтөндә эш: мәғлүмәт эҙләү һәм укылғанды аңлау | o Текстан конкрет мәғлүмәтте, факттарҙы табыу<br>o Текстың темаһын һәм төп фекерен асыҡлау<br>o Тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, план төҙөү<br>o Текста бирелгән төп ваҡиғаларҙы табып тәртипкә һалыу<br>o Текста бирелгән | • Аукцион<br>• Терәк һүҙҙәр<br>• Блум кубы<br>• Сүкеш<br>• Мейе штурмы<br>• Фал ағасы<br>• Инсерт<br>• Кластер<br>• Ышанаһығыҙмы һеҙ?<br>• Мин – автор<br>• Идеялар кәрзине |

| | | |
|---|---|---|
| | объекттарҙы билдәләре буйынса бер-береһе менән сағыштырыу<br>○ Йәшерен мәғлүмәтте аңлау (мәҫәлән, текстан раҫланған фекерҙе дәлилләүсе бер нисә миҫал табыу, төркөмләп бирелгән элементтарҙың  дөйөм билдәһен табыу)<br>○ Төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте аңлау : таблица, схема диаграмма һ.б.<br>○ Тексты жанры, төҙөлөшө, һүрәтләү сараларына таянып аңлау.<br>○ Эш барышында маҡсатҡа ярашлы таныштырыу, өйрәнеү. эҙләнеү кеүек уҡыу төрҙәрен һайлау<br>○ Уҡыусыларҙы һүҙлектәр һәм белешмәләр  менән эш итергә өйрәтеү<br>○ Бер нисә мәғлүмәт сығанағы менән эшләү һәм табылған мәғлүмәтте сағыштырыу | • Таныш булмаған таныш |
| Текст өҫтөндә эш: мәғлүмәтте үҙгәртеп ҡороу һәм | ○ Тексты телдән ентекле йә ҡыҫҡаса һөйләү, яҙма рәүештә биреү<br>○ Факттарҙы текстың | • Блум кубы<br>• Терәк һүҙҙәр<br>• Беләм, белергә теләйем. белдем |

| | | |
|---|---|---|
| интерпретациялау (мәғәнәһен асыҡлау) | дөйөм идеяһы менән тап килтереү, унда асыҡтан-асыҡ күрһәтелмәгән бәйләнештәрҙе булдырыу<br>○ Тексҡа таянып, ябай һығымталар яһау, һығымталарҙы дәлилләүсе аргументтарҙы табыу<br>○ Текстың төрлө өлөшөндәге мәғлүмәтте дөйөмләштереү һәм сағыштырыу<br>○ киләсәктә ҡулланыу маҡсатында уҡылған текстан кәрәкле мәғлүмәтте яҙып алыу<br>○ уҡылғандарға яҙма аннотациялар һәм баһалама биреү | алымы<br>• Көндәлек һәм борт журналдары<br>• Плюс, минус, ҡыҙыҡлы<br>• Һүҙҙә ҡунаҡта<br>• Һорауҙар йомғағы |
| Текст менән эшләү: мәғлүмәтте баһалау | ○ Уҡылған тексҡа ҡарата үҙ фекерен белдереү, баһалау<br>○ Текстың йөкмәткеһен, структураһын һәм телмәр үҙенсәлектәрен баһалау; бирелгән иллюстрацияларҙың тексты аңлауға булышлыҡ итеүҙәге ролен билдәләү<br>○ Булған белемгә, тормош тәжрибәһенә нигеҙләнеп, текста бирелгән мөғлүмәттәрҙең | • Ирекле микрофон<br>• Реклама<br>• Эссе<br>• Иҫтәлек төйөнө<br>• Мин – автор<br>• Блум кубы<br>• Беләм, белергә теләйем,белдем алымы<br>• Смайл<br>• Тамамланмаған һөйләм |

| | | |
|---|---|---|
| | дөрөҫмө, түгелме икәнлеген билдәләй алыу; тулы булмаған мәғлүмәтте тойомлап тулыландырыу<br>o Уҡылған,йәки тыңланылған әҫәрҙәр буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыу<br>o Төрлө ҡараштарҙа туҡталып, бер фекергә килеү<br>o Автор позицияһы менән үҙ фекереңде сағыштырыу<br>o Бер йәки бер нисә сығанаҡ менән эшләү барышында дөрөҫ йәки ҡаршылыҡлы мәғлүмәтте асыҡлау | |

**Фал ағасы**

Авторы – Америка уҡытыусыһы Дж. Белланс

Был сюжетты күҙаллау, сюжет барышын алдан күрә белеү алымы




Әҫәрҙе уҡығанға тиклем уҡыусыларҙың унда нимә тураһында һүҙ барыуын күҙаллап яҙып барыуҙары.

Ағастың олоно – тема, ботаҡтары – ике йүнәлеш буйынса күҙаллау "мөмкин", "ихтимал" ("ботаҡтар" һаны сикле түгел). Ә япраҡтар уйлағандарҙың, теге йәки был күҙаллауҙарҙың дәлиле.

Тема: М. Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ баласаҡ» әҫәре

Маҡсат: уҡыу күнекмәләрен үҫтереү,

Бурыстар: уҡыусыларҙы “Оҙон-оҙаҡ баласаҡ” повесы менән таныштырыу, танып-белеү эшмәкәрлеген үҫтереү;

уҡыусыларҙың аң даирәһен киңәйтеү, телмәрен, күҙәтеүсәнлеген, уҡылғанды анализлау күнекмәләрен үҫтереү.

| Уҡыусылар эшмәкәрлеге | Уҡытыусы эшмәкәрлеге : уҡыусыларҙың белемдәрен ,телмәрен,күҙәтеүсәнлеген,әҫәрҙе анализлау күнекмәләрен үҫтереү |
|---|---|
| Уҡыусылар фекер алышалар, төркөмдәрҙә эштәрҙе бүлешәләр Үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашалар | |

**Реклама**

“Китап – белем шишмәһе”

Ҡәҙерле дуҫ! Һине китаптар донъяһына саҡырам! Һәм ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе уҡырға тәҡдим итәм.




- Әгәр ҙә һин әҙәби китаптар уҡырға яратһаң, күренекле яҙыусыларыбыҙҙың бик күп темаларға арналған иҫ киткес матур әҫәрҙәре менән танышырһың.

- Ғайса Хөсәйеновтың “Алдар батыр ҡиссаһы”повесын уҡыһаң, башҡорт халҡының тарихы ҙур ваҡиғаларға һәм тарихи шәхестәргә бай икәнен белерһең, батырлыҡ һәм ғорурлыҡ донъяһына эләгерһең. Ижади эшеңдә һүрәттәрҙе үҙеңә оҡшағанса итеп буяй алырһың.

- “Урал батыр” төҫлө иллюстратив альбомында башҡорт халҡының данлыҡлы эпик ҡомартҡыһы менән танышырһығыҙ.

- М. Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ ” повесын уҡыһаң, һин янында йәшәгән кешеләрҙең ҡәҙерен белергә өйрәнерһең.

- Оло мәғәнәгә эйә булған әҫәрҙәр мөғжизәләр донъяһына алып барыр һәм тормошта йәшәргә өйрәтер.

- З. Биишеваның батырлыҡ, матурлыҡ, йомартлыҡ, һөйөү һәм хыянат кеүек мәңгелек темаларға яҙылған әҫәрҙәрен уҡып, үҙегеҙҙе борсоған һорауҙарға яуап табырһығыҙ.

**Туҡталыш менән уҡыу**

Был алымды ҡулланыу әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә отошло.

Уҡытыусы алдан әҫәрҙе мәғәнәһе яғынан өлөштәргә бүлеп, йөкмәткеһенә ҡарап, һорауҙар әҙерләй. Туҡталыш яһағанда уҡыусыларға һорауҙар бирелә, уҡыусылар әҫәрҙә артабан ниндәй хәл-ваҡиғалар булыуын күҙаллай.

Психолог Бенджамин Блум тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһы һорауҙарын түбәндәгесә төркөмләй:

- ябай (“кем?”, “нимә?”, “ҡасан?”, “ҡайҙа?”);
- аңлатыусы (“ни өсөн?”);
- асыҡлаусы (“мин дөрөҫ аңлағанмынмы?..”, “дөрөҫмө?”);
- баһалаусы (“нимә менән айырыла?”, “һин быға нисек ҡарайһың?”);
- практик (“һин ни эшләр инең?..”);
- ижади (“ни булыр, әгәр ҙә?..”).

Ә иң мөһиме “артабан нимә булыр һәм ни өсөн?” тигән булырға тейеш.

Мәҫәлән, Талха Ғиниәтуллиндың
“Әсә һәм бала” хикәйәһен уҡығанда ошо алымды ҡулланыу отошло. Әҫәрҙе өлөштәргә бүлеп, туҡталыштар эшләйбеҙ һәм һорауҙар бирәбеҙ.

1.Әҫәрҙең исеменә ҡарап әйтегеҙ, хикәйә нимә тураһында барасаҡ?
2.Һеҙҙеңсә ниндәй булырға тейеш?
3.Ҡыҫҡағойроҡ дөрөҫ эшләнеме? Һин быға нисек ҡарайһың?
4.Мин дөрөҫ аңлағанмынмы? Ысын дуҫты тик һынап ҡарап ҡына белеп була!




5.Терпе урынында булһаң, һин ни эшләр инең?
6. Артабан Ҡыҫкағойроҡ менән нимә булыр? Ни өсөн?

## Кластер

Был һүҙ “бәйләм”, “тәлгәш” тигәнде аңлата, икенсе төрлө уны “идеялар яланы” тип атарға мөмкин. Ул график системалаштырыуҙы, билдәле бер теманы, һүҙҙе, төшөнсәне асыҡлаусы бик күп мәғлүмәт йәки һүҙҙәр теҙмәһен үҙ эсенә ала. Әҫәрҙе күҙаллағанда, ыңғай һәм кире образдарға характеристика биргәндә кластер алымын уңышлы ҡулланырға була.

Мәҫәлән, 8-се класта Зәйнәб Бейешеваның“Һөнәрсе һәм Өйрәнсек” әҫәренең йөкмәткеһен үҙләштергәс, геройҙарға характеристика биреү “кластер” алымы менән башҡарыла.Һөнәрсе менән Өйрәнсектең ниндәй сифаттарға эйә булыуын асыҡлап, уҡыусылар үҙ аллы кластер төҙөй. Аҙаҡ слайд ярҙамында уҡытыусы төҙөгән кластер менән сағыштырып, хаталарын таба, һығымта яһай.

Бындай алым ярҙамында уҡыусы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлай; үҙ фекерен әйтергә, сағыштырырға, һығымта яһарға, һүҙҙәрҙең синоним, антоним, омонимдарын табырға һәм телмәрҙә ҡулланырға өйрәнә.

## Инсерт

Был алым “саҡырыу” стадияһында ҡулланыла. Ул уҡыусыларҙы үҙ аллы фекерләргә, һығымта яһарға өйрәтә, монологик һәм диалогик һөйләү телмәрен үҫтерә. “Инсерт” алымын әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштергәндә йәки яҙыусының биографияһы менән танышҡанда ҡулланыу отошло. Тәүҙә шартлы тамғалар ярҙамында әҫәрҙе үҙ аллы уҡыйҙар, төп фекерҙе табып, теманы билдәләйҙәр, уҡытыусы әҙерләгән һорауҙарға яуап бирәләр, йәки үҙҙәре әҫәр йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөйҙәр.

Мәҫәлән, 8-се класта Әмир Әминевтың “Ҡытайгород”повесын өйрәнгәндә, яҙыусының тормош һәм ижад юлын ошолай өйрәнергә

була. Шулай уҡ “инсерт” алымын йомғаҡлау дәрестәрендә ҡулланыу ҙа отошло.

| **Яҙыусының тормош юлы һәм ижады** | !- яңылыҡ белдем<br>?- аңлашылмай<br>+ - миңә билдәле |
|---|---|
| Әмир Әминев - яҙыусы, “Ағиҙел” журналы ның баш мөхәррире<br>✓ Ул Ғафури районында тыуған<br>✓ Хәҙерге көндә баш мөхәррир булып эшләй<br>✓ Хикәйәләр ,повестар яҙа<br>✓ Балалар өсөн яҙылған китаптары: “Алтын тараҡ”, “Сәнскеле күлдәк”, “Ҡурай”һ.б.<br>✓ Айһылыу Йәғәфәрова – тәржемәсе.<br>✓ Уның наградалары: Башҡортостадың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре<br>✓ Яҙыусы Ким Әхмәтйәнов исемендәге премия лауреаты | |

## Беләм – белергә теләйем – белдем

Был алымға нигеҙ һалыусы – Чикаго профессоры Донн Огл. Уны өс стадияла ла ҡулланырға мөмкин.

“Саҡырыу” стадияһында таблицаның “беләм”, “белергә теләйем”, теманы үҙләштергәс, “рефлексия” стадияһында “белдем” графаһы тултырыла. Уҡыусыларҙың һәләтенә ҡарап, өсөнсө графаны өйҙә тултырырға бирергә мөмкин. Һөҙөмтәлә уҡыусының ижади фекерләүе, танып – белеү һәләте, яҙыу һәм һөйләү телмәре үҫешә; ул ишетеп –күреп белгәндәрен сағыштырырға, иҫбатларға, үҙ аллы һығымта һәм асыш яһарға өйрәтә.

Мәҫәлән, 7-се класта Илгизәр Диҡҡәттең “Башҡорт көсө” хикәйәтен уҡығанда ҡулланыу отошло.

| Беләм | Белергә теләйем | Белдем |
|---|---|---|
| Бер бөртөк төркөмгә ҡалған башҡорттар дошман ҡулына эләкһәләр ҙә баш эймәй,ғәйрәтле хан алдында үҙҙәрен ғорур һәм көслө заттар итеп тота. | Башҡорттоң көсөнөң сере нимәлә? Ҡайҙан килгән уға был көс? | ? |

## Синквейн

Синквейн (фр. cinquains, ингл. cinquain) – алымы ла "рефлексия" стадияһында бик файҙалы алым. Синквейн – рифмалашмаған биш юллыҡ шиғыр.  Ул ябай шиғыр түгел Уны яҙыуҙа түбәндәге ҡағиҙәләрҙе күҙ уңында тоторға кәрәк:

1 юл– синквейндың темаһын белдергән исем.

2 юл – төп фекерҙе белдергән ике сифат.

3 юл – темала һүрәтләнгән эш- хәрәкәтте белдереүсе өс ҡылым.

4 юл – билдәле бер фекерҙе белдергән фраза.

5 юл – исем формаһында һығымта (беренсе һүҙ менән ассоциация).

Мәҫәлән, 7-се класта Талха Ғиниәтуллиндың "Әсә һәм бала" хикәйәһен  уҡығандан һуң, уҡыусылар әсәй темаһына синквейн төҙөйҙәр.

1 юл– әсәй

2 юл – ҡәҙерле, һөйкөмлө

3 юл – бешерә, үҫтерә, төҙөй

4 юл – Әсәйҙең ҡулдары алтын.

5 юл – ҡояш.

Шулай итеп, тәнҡитле фекреләүҙе үҫтереү технологияһы ярҙамында уҡыусының материлды алдан уҡ күҙаллау, уй-фекерен иптәштәренә еткереү мөмкинлеге тыуа; һүҙ байлығы арта, бәйләнешле һөйләү телмәре үҫешә.

## Блум кубы

Күренекле америка педагогы һәм психологы Бенджамин

Блумды «Уҡыу маҡсаттарының» таксонимияһы авторы булараҡ беләләр. Күптәр Блумды бер нисә оригиналь педагогик техник алымдарҙың авторы булараҡ таный. Шуларҙың береһе «Блум кубы».

Кубтың яҡтарында һорауҙарҙың башы яҙыла:

«Ни өсөн»

«Аңлат»

«Әйт»

«Тәҡдим ит»

«Уйлап сығар»

«Уртаҡлаш» һ.б.

Уҡытыусы (йәки уҡыусы) кубикты ташлай. Кубиктың ниндәй яғы төшә, уҡыу материалына ярашлы һорау төҙөргә кәрәк.

Күп осраҡта һорауҙар Америка педагогы һәм психологының китаптарының төп идеяларына тап килә. Блум фекеренсә, мәктәптә алған белемдәр тормошта осраясаҡ проблемаларҙы сисергә ярҙам итергә тейеш. Таксономияның (интеллектың күп төрлөлөгө тураһындағы теория) төп принцибы уның уҡыусыларҙы проблеманы хәл итергә өйрәткәндә лә, уҡыу һөҙөмтәләрен баһалағанда ла практик уҡытыусы ҡулында эффектив ҡорал булыуында. Был идеялар Блум кубында тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, «Әйтеп үт...» тип башланған һорау репродукция йәки белемдәрҙе тикшереү кимәленә тура килә.

«Ниңә....» тип башланған һорау процессуаль белемдәргә тап килә. Уҡыусы был осраҡта сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табырға һәм предмет йәки күренештең процесын һүрәтләргә тейеш.

«Аңлатып бир…» һорауына яуап биргәндә уҡыусы яңы ситуацияла принциптарҙы һәм аңлатмаларҙы, ҡанундарҙы, конкрет практик ситуацияларҙа теорияларҙы ҡуллана һәм метод йәки процедураның ҡулланышын күрһәтә. Әлбиттә «Тәҡдим ит…», «Уйлап сығар..», «Уртаҡлаш..» кеүек күнегеүҙәр укыусының уйлау һәләтен активлаштырыуға йүнәлтелгән. Ул билдәһеҙ фараздарҙы айыра, факт һәм һөҙөмтә араһындағы айырманы күрһәтә, анализлай, бирелештәрҙең әһәмиәтен баһалай, төрлө өлкәләрҙәге белемдәрен ҡуллана, алдағы бирелешенә һәм һөҙөмтәһенә иғтибар итә.

Баналь ятлау укыусыға уҡыу материалын һөҙөмтәле үҙләштереүгә ярҙам итмәүе асыҡтан-асыҡ.

Был алым ике режимда ҡулланылырға мөмкин:

- Уҡытыусы тура килгән һорауҙар бирә.
- Уҡыусылар һоруҙар уйлайҙар.

Репродуктив характерҙағы һорауҙарға яуап табыуы еңел. Ауырырағы сәбәп-һөҙөмтә бәйләнешен эҙләүгә йүнәлтелгән һорауҙар төҙөү. Тағы ла ауырырағы «Тәҡдим ит…», «Уйлап сығар…», «Уртаҡлаш…» тигән һүҙҙәр менән башланған һорау-күнегеүҙәр уйлау.

Әлбиттә ,уҡытыусы һәр уҡыусының хеҙмәтен төрлөсә баһаларға тейеш. «Блум кубы»н үҙ аллы йәки «актив-продуктив уҡыу» техникаһы өлөшөндә лә ҡулланырға була.

## Мин - рәссам

Ижади эш башҡарыу: уҡылған әҫәрҙәрҙәге образдарҙы телдән һүрәтләү, әҫәрҙәр йөкмәткеһе буйынса һүрәт төшөрөү, декорациялар әҙерләү.

Д. Бураҡаев “Урал тауҙары” – иллюстрациялар

Д. Бураҡаев “Урал тауҙары”. Урал - бейек тауҙар, текә ҡаялар, таҙа һыулы йылғалар иле. Ул ҡуйы, урмандарға, хуш еҫле сәскәләргә, төрлө кейектәргә, һәм балыҡтаға бай ил. Урал ике континентты – Европа менән Азияны бүлеп ята.

Ғ.Хөсәйенов “Алдар батыр” – иллюстрация

А. Йәғәфәрова “Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар”. Ҡыҫҡағойроҡ исемле ҡуян балаһы һәм Терпенең дуҫлығы тураһында һүҙ бара. Ҡыҫҡағойроҡ дуҫлыҡты һынар өсөн Терпене төрлө яҡлап тикшереп ҡарай. Был дуҫлыҡтың тарҡалыуына килтерә. Ҡыҫҡағойроҡ – үҙен генә яратҡан, әсә һүҙенә ҡолаҡ һалмаған, башҡаларға талапсан...ҡуян балаһы. Терпе ихлас, ярҙамсыл, тоғро, итәҙәтле, ипле һ.б....

Шулай итеп, йәмғиәт ҡырҡа үҙгәрештәр кисергән осорҙа башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы (йөкмәткеһе, структураһы, методтары һәм алымдары) заманға ярашлы яңыртыу талап итә. Уҡыусыларҙы үҙ аллы эшләргә өйрәтеү, тормошҡа яраҡлаша белергә, юғалып ҡалмаҫҡа, индивидуаль үҙенсәлеген һаҡларға һәм үҫтереүгә йүнәлеш биреү өсөн уҡыу-уҡытыу процесын яңыса ойошторорға кәрәк. Был әсбапта тәҡдим ителгән уҡытыу алымдары уҡыусының субьектив тәжрибәһе нигеҙендә үҙ көсө менән яңы белем үҙләштереүгә, төрлө ситуацияларҙы уңышлы үтергә, үҙенең фекерен иҫбатлай белергә ярҙам итергә тейеш.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Аҙнағолов Р.Ғ. Хәҙерге дәрес. Унының этаптары, төрҙәре:уҡыу ҡулланмаһы. Үҙгәрешле икенсе баҫма. — Өфө: БашДУ, 2010 – 155 бит,
2. Ғафаров Б.Б. Әҙәбит уҡытыу методикаһы. — Өфө: Китап, 2008. – 352 бит.
3. Иҙелбаев М.Х. Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. — Өфө: Китап, 2013. - 200 бит.
4. Исҡужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы. — Өфө: Китап, 2011- 120 бит.
5. Светловская Н.Н., Пиче-оол Т.С. Обучение детей чтению. Практическая методика. –М: Аркти, 2007. — 54 с.
6. Сөләймәнов Ә.М., Хөббитдинова Н.Ә. Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары: юғары класс уҡыусылары, филолог студенттар, бакалаврҙар, магистранттар, аспиранттар, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт уҡытыусылары өсөн ҡулланма. — Өфө: Китап, 2012. – 168 бит.
7. Төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт әҙәбиәте буйынса өлгө программалар. /төҙ.: М.Б. Юлмөхәмәтов. — Өфө: Китап, 2011. – 80 бит. – (Икенсе быуын стандарттары).
8. Хуторской А.В. Компетентностный подход в обучении. Научно-методическое пособие. — М.: Издательство Института образования человека, 2013. — 73 с. : ил. (Серия «Новые стандарты»).

9. Эльконин Д.Б. Как учить детей читать? - М: Просвещение 1976. – 186 с.